ПУБЛИЦИСТИКА

*Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА*

# ЙӘШӘҮ ЙӘМЕ МӘРХӘМӘТТӘ



*Зәриғәт Мәзхәт улы Ғәзизов*

Унының йөҙөнә йылмайыу йәшеренгән һәм хатта борсоулы саҡтарында ла, бөтөнләй һүнеп бөтмәй, боҫоп ҡына ҡала ла, форсат сығыу менән тағы ла нығыраҡ балҡып китә. Тормоштоң йәмен аңлап, кешеләрҙе яратып йәшәгән бәхетлеләрҙә генә шулай булалыр, моғайын. "Башинформсвязь" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең «Спутник» республика етештереү-сауҙа үҙәге директоры Зәриғәт Мәзхәт улы Ғәзизов менән танышҡас та иң беренсе шул күҙгә ташланды.

Ул ауыл малайы, хатта һуңғы йылдарҙа көн итмеше ҡалаға бәйле булыуға ҡарамаҫтан, күңеле менән һаман Миәкә районының үҙе тыуып үҫкән Яңы Ишле ауылынан айырылғаны юҡ. Игенсе эшенең ауырлығын, крәҫтиән тормошоноң ни тиклем тырышлыҡ һәм егәрлелек талап иткәнен үҙе татып белгәнгә күрә, ауыл халҡының мәнфәғәт-мохтажлыҡтарын яҡшы аңлай.

Атаһы Мәзхәт ағай бөтөн ғүмерен колхоз эшенә бағышлаған. Оҙаҡ йылдар баш агроном, унан колхоз рәйесенең төҙөлөш буйынса урынбаҫары булып эшләй. Ауыр сирҙән инвалид булып ҡалғас, төшөнкөлөккә бирелмәй, ҡырҡ өс йәшендә умартасылыҡ техникумының көндөҙгө бүлегенә уҡырға инә һәм өс йыл буйы алыҫ Архангельск ҡалаһында был боронғо, мауыҡтырғыс һөнәрҙең серҙәренә төшөнә.

Колхозға ҡайтып, буш урында тигәндәй умарталыҡ ойоштороп ебәрә һәм бер йыл эсендә умарталар һанын 150-170-кә еткерә. Уға тәүҙә ҡатыны, унан үҫеп етеп килгән малайҙары ярҙам итә. Шулай итеп, Мәзхәт Ғәзизов тиҙ арала районда ғына түгел, республикала алдынғы умартасы булып таныла.

Әсәһе Рәүиә колхоз эшендә ҡатнашыуҙан башҡа, ҡул эшенә лә оҫта була, балаҫ һуға, дебет шәл бәйләй. Колхозсының ғүмер баҡый балаларын уҡытыу, кейендереү өсөн хеҙмәт хаҡынан бигерәк өҫтәлмә кәсептән алған табышҡа таянғаны сер түгел. Ғәзизовтарға ла бер-бе-

реһенең үксәһенә баҫып үҫеп килгән алты баланың — уларҙың бишәүһе малай, береһе ҡыҙ — өҫ-башын бөтәйтеү өсөн әсәй кешенең ҡул эшенә оҫталығы бик ҙур ярҙам була.

— Әсәйем шәлдәр бәйләп, балаҫтар һуғып әҙерләгәс, атайым ҡышҡыһын Үзбәкстанға сығып китә торғайны. Шуларҙы һатып, беҙҙең барыбыҙға ла бер иштән уҡыу формаһы, башҡа кейем-һалым алып ҡайта. Шуға күрә мәктәптә иң яҡшы кейенгәндәре беҙ булдыҡ, — тип хәтерләй Зәриғәт Мәзхәт улы.

Дөрөҫ, был уңған ғаиләлә балалар ҙа тик ятмай, дөйөм бюджетҡа ҡулдарынан килгән тиклем үҙ өлөштәрен индерә. Зәриғәт Мәзхәт улында һаман да иң ҡәҙерле бүләктәр араһында колхоздың 1964 йылда бирелгән Маҡтау грамотаһы һаҡлана. Ул ике йыл рәттән, алтынсы-етенсе синыфтарҙы тамамлағас, йәйге каникул осоронда сусҡа көткәндә яҡшы эшләгәне өсөн бирелгән. Грамотаға өҫтәп, хеҙмәт хаҡынан тыш, йәнә 10 һум премия менән дә бүләкләнгән. Ә бит ул саҡта ун һум ҙур аҡса була торғайны. Хәтерем яңылышмаһа, колхозсыларҙың ҡартлыҡ буйынса айлыҡ пенсияһы 12 һум тәшкил итә ине.

Зәриғәт — ғаиләлә икенсе бала. Улар үҙенән йәш ярымға ғына өлкән Рифғәт ағаһы менән ярышып, бер-береһенә ярҙамлашып уҡыйҙар. Ағаһы гуманитар фәндәрҙән көслө булһа, ул математика, физиканан һәләтлерәк.

— Ағайым бик яҡшы уҡый торғайны, өҫтәүенә, актив йәмәғәтсе ине. Артабан ул Ленинградта хәрби-медицина академияһын тамамланы. Уҡып йөрөгән йылдарында уҡ академияның партия ойошмаһы секретары булып һайланды. Ғүмеренең ахырында ҙур вазифа биләне — Ленинград хәрби округының медицина хеҙмәте начальнигы булды. Хатта СССР оборона министры Гречконың исемләп бирелгән бүләктәренә лайыҡ булды, — тип моңһоу ғорурлыҡ менән иҫкә ала ағаһын Зәриғәт Мәзхәт улы. — Атом һыу аҫты кәмәһендә йылдан ашыу диңгеҙ аҫтында йөрөп нурланғанлыҡтан, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, арабыҙҙан бик иртә, 46 ғына йәшендә китеп барҙы. Әммә ул беҙгә ғүмер буйы яҡшы үрнәк булды.

Уҡыу йылдары ауыр осорға тура килһә лә — ул ваҡытта электр юҡ, кәрәсин лампаһы, уҡырға китап, яҙырға дәфтәр етмәй — Ғәзизовтар ғаиләһендә ғилем эстәүгә иғтибар ифрат ҙур була. Үҙе гел бишлегә генә өлгәшкән, тик артабан уҡырға форсаты булмаған әсәләре үҙенең аң-белемгә ынтылышын балаларына йоҡтора, улар уҡыһын өсөн тырышлығын да, ваҡытын да йәлләмәй. Йортта ҡырҡмаһа ҡырҡ эше булыуға ҡарамаҫтан, аҙна һайын һәр балаһының дәресендә ултырырға ла, уҡыуҙарын күҙәтеп, талап итеп торорға ла ваҡыт таба. Ата-әсәнең ипле, шул уҡ ваҡытта талапсан булыуы, әлбиттә, балаларға йоғонто яһамай ҡалмай.

Сәғәт түгел, минуттың ҡәҙерен белеп, дәртләнеп йәшәгән Рәүиә апай балаларын да шуға күнектерә. Һәр береһе көн тәртибе төҙөй, унда барыһы ла төпсөрләп яҙылған: ҡасан уҡырға, ҡасан ашарға, ҡасан тышҡа сығып ярҙам итергә. Биш уҡыусы — биш көн тәртибе. Әсә уны раҫлап, имзаһын ҡуя. Өй эше, ҡулдарынан килеүҙе иҫәпкә

алып, гәҙел бүленгән: кем һыу ташый, кем аҙбар таҙарта, кем утын яра.

Яңы Ишле халҡы эсер өсөн тәмле һыуҙы өйҙән бер километр самаһы йыраҡлыҡта ағып ятҡан Түкәр шишмәһенән ала. Шунан санаға ҙур фляга ултыртып һыу алып ҡайтыу Зәриғәткә йөкмәтелә. Рифғәт ағаһына — утын ярыу, кемгәлер ҡар көрәү тура килә. Йәй булһа, күмәкләшеп йәшелсәләргә һыу һибәләр, хатта ишек алдында ла күпереп торған бәпкә үләне үҫтерәләр.



*Ата-әсәһе*

Әсәйҙәренең тағы ла бер ҡәтғи талабы бар: эш мотлаҡ еренә еткереп башҡарылырға тейеш.

— Тыңламаған ваҡыттар ҙа булғандыр инде, — тип йылмая Зәриғәт Мәзхәт улы. — Ундай осраҡтар өсөн һәр беребеҙ үҙенә тал сыбығы алып ҡайтып, өрлөккә ҡыҫтырып ҡуя, тик бик әләккәнен хәтерләмәйем. Тәрбиә өсөн тора ине.

Ул заманда ауылда уҡытыусы һөнәре ифрат абруйлы. Бигерәк тә уҡытыусы булараҡ та, шәхес булараҡ та бик көслө, ихлас, гәҙел мәктәп директоры Ғәбделхәй Ғиләж улы Юнысовты халыҡ бик ихтирам итә. Уға сикһеҙ һоҡланыу менән ҡараған Зәриғәт уҡытыусы булырға хыяллана һәм, унынсы синыфты уңышлы тамамлағандан һуң, Башҡорт дәүләт педагогия институтының физика-математика факультетына уҡырға барырға ҡарар итә. Һәйбәт уҡыған дүрт уҡыусыһын Өфөгә мәктәп директоры үҙе оҙатып килә. Ҡаҡса ғына, етмәһә, буйға бәләкәй — бары бер метр ҡырҡ сантиметр — малайҙың мәктәп тамамлағанына ышанмайынса, башта документтарын ҡабул итергә теләмәйҙәр. Етмәһә, Черниковкала фатирға туҡтаған Зәриғәт тәүге имтиханға теп-теүәл бер сәғәткә һуңға ҡала. Әлбиттә, уны индермәйҙәр, ялынып илап ебәргәс кенә йәлләйҙәр.

— Мин барыбер иң беренсе сығасаҡмын, — тип вәғәҙә бирә үҙ көсөнә ышанған Зәриғәт. Тик өлгөрмәй. Кешеләр сыға башлағанда биш мәсьәләнең дүртеһен сискән, һуңғыһын башлап ҡына ҡуйған. Нишләһен, вәғәҙә — иман, аҙаҡҡа ҡалырға ярамай. Шулай ҙа «дүртле» билдәһе ала.

Ә физиканан имтихан алыусы Горохов тигән өлкән йәштәге уҡытыусы уны:

— Улым, кемде эҙләйһең? Һиңә нимә кәрәк? — тип, ғәжәпләнеп ҡаршы ала. Билет алыу менән, әҙерлекһеҙ сатнатып яуап биргәс, бишле ҡуйып сығара. Башҡа имтихандарын да уңышлы тапшырып, институтҡа инеп ҡайта ауылына Зәриғәт. Икенсе-өсөнсө курстарҙы тик бишлегә генә уҡып, юғары стипендия алыуға өлгәшә, ата-әсәһенә матди ауырлыҡ һалырға теләмәй, үҙ көнөн үҙе күреп, буш ваҡытында кәбеҫтә тоҙларға, вагон бушатырға йөрөй. Ул дәүерҙәр әле лә хәтеренән сыҡмай.


*Зәриғәт һәм Минзәлә Ғәзизовтар, 1977 йыл*

1972 йылда институтты уңышлы тамамлағандан һуң, Зәриғәт Ғәзизов хеҙмәт юлын тыуған районында, Миәкәтамаҡ һигеҙ йыллыҡ мәктәбендә уҡыу-уҡытыу эштәре бүлеге мөдире булып башлай. Үҙен эшкә өйрәткән өлкән хеҙмәттәштәрен, айырыуса мәктәп директорын ғүмере буйы йылы итеп хәтергә ала.

Ике йылдан егәрле һәм һәр сарала әүҙем ҡатнашҡан егетте район комсомол комитетының икенсе секретары итеп һайлап ҡуялар, бында бер йыл эшләгәндән һуң, Баязит урта мәктәбенә директор итеп тәғәйенләйҙәр. Үҙенә ышанып тапшырылған был оло бурысты ҙур яуаплылыҡ менән ҡабул итә йәш етәксе. Уҡыу барышы мауыҡтырғыс булһын, тәрбиә эше тейешле кимәлдә ойошторолһон өсөн ең һыҙғанып тотона.

Башта абруй яулар өсөн күп көс һалырға кәрәк. Баланы үҙеңә йәлеп итер өсөн уны мауыҡтырыу, ҡыҙыҡһындырыу мөһим. Биш ҡат әйткәнсе, бер тапҡыр күрһәтеү күпкә отошло. Уҡытыусы булараҡ, баштан уҡ шундай ҡағиҙәгә таянып эшләй ул. Тотош илдә яңы ғына кабинет системаһына күсә башлаған замандар. Ул был башланғысты шунда уҡ күтәреп ала. Төрлө механизмдар уйлап сығарырға әүәҫ булғанлыҡтан, Миәкәтамаҡта ла көндәрен уҡыта, кистәрен кабинет йыһазландырыу менән мәшғүл була. Баязитта ла ошо эшенә тотона. Күҙ алдына килтерегеҙ: бына дәрестә уҡытыусы тәҙрә ҡорғандарын өҫтәлдәге кнопкаға баҫып ҡына яба, экран үҙенән-үҙе төшә, диапроекторҙы ла ҡул менән өйөрөлтмәй, алға һәм артҡа күсерә торған идара пульты эшләп ҡуя. Балалар, әлбиттә, һуштары китеп ҡарап ултыра. Шул рәүешле фән менән дә ҡыҙыҡһыныу арта. Бик күп электрон йыһаздар эшләй уҡытыусы, уҡыусылары менән лаборатор эштәр, тәжрибәләр үткәрә. Бик матур йыһазландырылған лингафон кабинеты эшләп ҡуя. Был яңылыҡтарҙы Халыҡ мәғарифы министрлығында ла күрмәй ҡалмайҙар. Уларҙың мәктәбендә республика семинары үткәрелә, тәжрибә уртаҡлашырға, өйрәнергә килеүселәр күбәйә. Уҡыусылары физика һәм математика буйынса олимпиадаларҙа ҡатнаша башлай. Хатта Манаков Рөстәм Хажи улы, ул әле колхоз рәйесе булып эшләй, республика буйынса икенсе урынды яулай.

Ҡыҫҡаһы, әсәһе бала саҡтарында ниндәй тәртипкә өйрәткән, бөтөн мәктәпте шуға күсерә йәш директор: ваҡытында дәрес әҙерләргә, ваҡытында өй эштәрендә ярҙам итергә, тәғәйен сәғәттә актив ял итергә. Бер генә бала ла ситтә ҡалырға тейеш түгел, һәр кемдең күңеленә ятышлы шөғөл табылһын тигән маҡсаттан сығып, бик күп түңәрәктәр ойошторола. Әлбиттә, ата-әсәләрҙең үҙен дә тәрбиәләргә тура килә.

Кем эсеп йөрөй, кем балаларына тейешле иғтибар бирмәй, тәртибе һәм уҡыуы менән ҡыҙыҡһынмай. Кис көнө директор үҙе ауыр холоҡло, насар уҡыған балаларҙың өйҙәренә инеп, йәшәү шарттары менән таныша. Ата-әсәләр йыйылышында ла тәртипте ҡаты ҡуя. Унда барыһы ла ҡатнашырға тейеш, бер генә кеше килмәһә лә, йыйылышты башламайҙар. Хатта колхоз йыйылышы үткәрергә кәрәк булһа ла, рәйес йәш директорға мөрәжәғәт итә: ул килһә, халыҡ мотлаҡ йыйыла. Әле өйләнмәгән йәш егеттең тырышлығын, талапсанлығын, дөйөм мәнфәғәт өсөн, уларҙың балалары өсөн янып йөрөүен ауыл халҡы, әлбиттә, баһаламай ҡалмай.

— Был ниндәй бала һуң ул? Беҙҙе хәҙер аҡылға өйрәтә лә баһа, — тип һоҡланалар.

Тырышлыҡ үҙенең һәйбәт һөҙөмтәләрен көттөрмәй, ул йылдарҙа мәктәпте тамамлаусыларҙың 80 проценты төрлө юғары уҡыу йорттарына уҡырға инә.

Сағыштырмаса оҙаҡ та эшләмәй ул Баязитта, әммә элекке уҡыусылары әле лә уға ҡарата ҙур хөрмәт һаҡлай. Насар уҡыған, ауыр балалар ҙа осрағанда: «Зәриғәт ағай, теге ваҡытта шелтәләгәйнең, хаҡ булған. Беҙ барыбер дөрөҫ юл менән барабыҙ», — тип рәхмәт әйтеп китә.

— Ә бындай һөҙөмтәләргә ирешер өсөн ниндәй сифаттар кәрәк, — тип ҡыҙыҡһынам.

— Үҙ һөнәреңде яратырға, бөтөн көсөңдө, һәләтеңде, ваҡытыңды шул эшкә бағышларға кәрәк. Бары шунда ғына ниәттәрең тормошҡа ашасаҡ. Ә инде көн үтһен, сабата туҙһын тип йөрөйһөң икән, уңыштарың да шул хәтлем генә буласаҡ. Мин шулай иҫәпләйем, — тип яуаплай З.М.Ғәзизов.

Тормош юлында баштан уҡ шундай эшкә мөкиббән кешеләр осрауы менән ул үҙен бәхетле һанай һәм уларҙы ғүмер буйы хөрмәтләп иҫкә ала. Хеҙмәттән тәм табып, уны еренә еткереп башҡарыуҙан ләззәт алып йәшәгән кешеләр — атаһы менән әсәһе, мәктәптә Ғәбделхәй Ғиләж улы Юнысов, институтта Эдуард Шәйхулла улы Хәмитов, әле Салауат Мөхтәр улы Ғайсин. Һанап китһәң, байтаҡ йыйыла.

Бер нисә йыл мәктәп директоры булып эшләгәндән һуң Зәриғәт Мәзхәт улын КПСС район комитетына пропаганда һәм агитация бүлеге мөдире итеп һайлайҙар. Был дәүерҙе ул халыҡ менән эшләүҙең академияһы итеп хәтеренә ала. Кеше тыуғандан алып һуңғы юлға, мәңгелек йортона оҙатылғанға тиклем йәмғиәт иғтибарында, йәмғиәт хәстәрлегендә булырға тейеш тигән маҡсат ҡуйыла уның алдына. Халыҡтың көнкүрешенә ҡағылышлы мәсьәләләр менән етәкселек иткәнгә күрә ул тотош районның тормошонда ҡайнап йәшәй. Хеҙмәтсәндәрҙең эшен генә түгел, ялын ойоштороуға ла ҙур иғтибар бүленә, үҙешмәкәр сәнғәтте, спортты үҫтереүгә күп көс һалына. Квартал һайын хеҙмәт кешеһен данлаған мауыҡтырғыс кисәләр, концерттар ойошторола, спорт ярыштары үткәрелә. Үҙгәртеп ҡороу йылдары башланып, коммунистар партияһы элекке әһәмиәтен юғалтҡас, Зәриғәт Ғәзизовҡа райондағы иң артта ҡалған тармаҡта — элемтә үҙәгендә — эш тәҡдим итәләр. Башта начальник урынбаҫары итеп

билдәләйҙәр, артабан начальник итеп ҡуялар. Тәүҙә бик ҡыйынға тура килә. Һәр кәңәшмә, йыйылыш һайын: «Элемтә юҡ, шуға күрә һөт юҡ, ит юҡ, иген юҡ», — тип бөтөн нәмәне уларға һылтайҙар. Яңы етәксе бына шул йән көйҙөргөс фекерҙе үҙгәртер өсөн, гәҙәтенсә, ең һыҙғанып эшкә тотона һәм тиҙ арала үҙен заман шарттарында уңышлы эшләй белгән алдынғы ҡарашлы, оҫта етәксе итеп таныта. Уның етәкселегендә районның 22 хужалығында АТС төҙөлә, элемтә яңыса үҙгәртеп ҡорола, 100 кешегә һәм 100 ғаиләгә тура килгән телефондар һаны буйынса улар ауыл элемтә узелдары араһында республикала беренсе урынға сыға. Иң артта һөйрәлгән элемтә үҙәге ике йыл эсендә бик күп күрһәткестәр буйынса алдынғылыҡты яулай. Инде Күсмә Ҡыҙыл байраҡ йыш ҡына уларҙа «ҡунаҡ була» башлай һәм бер заман, бөтөнләй уларҙа тороп ҡала.

Элемтә үҙәгенә мөнәсәбәт ҡырҡа үҙгәрә. Әлбиттә, эшкә колхоз-совхоздарҙың үҙҙәрен дә йәлеп итергә тура килә. Хужалыҡтарҙы дөйөм эшкә ылыҡтырыуҙа Зәриғәт Мәзхәт улына элекке абруйы ла, өлгәшкән уңыштар ҙа ярҙам итә. Башта бит кеше исем яулар өсөн эшләһә, артабан исем, абруй үҙе һинең өсөн эшләй башлай.

Әйтергә кәрәк, Миәкә элемтәселәре З.М.Ғәзизов эшләгән ваҡытта өлгәшкән уңыштарҙы әле лә дауам итә.

— Бында күп нәмә етәксенән тора, — тип иҫәпләй Зәриғәт Мәзхәт улы. — Бына егерме биш йыл инде элемтә өлкәһендә, Салауат Мөхтәр улы Ғайсин етәкселегендә эшләйем. Яҡшы нәтижәләргә ирешергә мөмкинлек биргәне өсөн мин уға бик рәхмәтлемен. Бер генә үтенесемә лә юҡ, тип ҡаршы килмәне, был кәрәкмәй, тип әйтмәне. Тәҡдимдәрҙе хуплап, уларҙы ғәмәлгә ашырырға ярҙам итте һәм әле лә иғтибарынан ситтә ҡалдырмай. Тормош юлымда бик яҡшы етәкселәргә осрағаным өсөн үҙемде бәхетле тоям.

Эште ойоштора белгән яҡшы етәкселәргә ихтыяж бер ваҡытта ла кәмемәй. Иң артта һөйрәлгән Миәкә элемтә үҙәген тиҙ арала алға сығарған З.М.Ғәзизовты, әлбиттә, Өфөлә лә күреп алалар һәм баш ҡалала юғары вазифалар тәҡдим итәләр. Башлаған эшен еренә еткереп башҡарырға күнеккәнлектән, ул алдына ҡуйылған бурыстарҙы тулыһынса үтәмәй тороп, урынынан ҡуҙғалмай. Бары тик 2001 йылда район кимәлендә ҡуйылған маҡсаттарына өлгәшкәнен тойоп, «Спутник» республика етештереү-сауҙа үҙәгенә директор булып килергә ризалаша.

Яңы эш урыны менән танышҡанда уҡ, бында ла еңел генә булмаясағын күреп ала. Предприятиеның территорияһы бысраҡ, уны сүпсар баҫҡан. Эш урындары тейешенсә йыһазландырылмаған, бүлмәләргә ремонт кәрәк.

Иң тәүҙә кешеләрҙе тейешле күләмдә эш менән тәьмин итеү, йөкмәтелгән бурыстарҙы бойомға ашырыр өсөн шарттар булдырыу үҙе үк дисциплинаға килтерәсәген яҡшы аңлай. Һәр ваҡыттағыса, ауырлыҡтарҙан ҡурҡмай, бөтөн күңелен һалып, йәнә эшкә тотона. Уның тәүге аҙымдарынан, тәүге бойороҡтарынан уҡ коллектив предприятиеға егәрле, инициативалы, эште яҡшы белгән талапсан етәксе килгәнен аңлай. Етештереү-хужалыҡ эштәрен оҫта ойоштороу, баҙар

шарттарында ихтыяждарҙы өйрәнеү, ҡыйыу аҙымдарҙан ҡурҡмау «Спутник»ты алдынғылар рәтенә сығара.

Әле «Спутник»та эшләүселәр үҙҙәренең эш һәм йәшәү шарттары менән ҡәнәғәт. Бында уртаса эш хаҡы — ун өс мең һум. Һуңғы ике йыл эсендә 27 ғаиләгә фатир бирелгән. Сәләмәтлекте нығытырға ярҙам итәләр. Аяҡҡа баҫып киткәнсе, йәштәргә матди ярҙам бүленә. Уларҙың йәшәү шарттары менән ҡыҙыҡһыныу, мохтаждарҙы дөйөм ятаҡ менән тәьмин итеү ҙә директорҙың иғтибар үҙәгенән ситтә ҡалмай.

Коллективты туплау өсөн художестволы үҙешмәкәр сәнғәтте тергеҙеп ебәрәләр. Даими рәүештә кисәләр үткәрелә, халыҡ һабантуйҙы көтөп ала һәм ихлас ҡатнаша. Унда етәкселәр үҙҙәре башлап йөрөй. Мәҫәлән, директор үҙе хорҙа йырлай, кәрәк икән концерттарҙа шиғыр ҙа һөйләй. Әлбиттә, был ыңғай үҙгәрештәр коллективтың эш күрһәткестәрендә сағыла. З.М.Ғәзизов килгәндә бында 370 кеше эшләһә, яңы тармаҡтар, мәҫәлән, автосервис асылыуға, сауҙа киңәйеүгә ҡарамаҫтан, эшләүселәр һаны кәмегән, хәҙер улар — 220 кеше. Йәғни, эштә етештереүсәнлек арта, ә был эшләгән кешенең хеҙмәт хаҡына ыңғай йоғонто яһай.

Хәҙер бында эскән кешене күрмәҫһең. Эшкә сыҡмау йәки һуңлап килеү осраҡтары ла юҡ. Территорияла теләһә ҡайҙа тәмәке тартыусы ла күренмәй, махсус билдәләнгән урын бар. Ғөмүмән, тартыусылар һирәгәйгән. Был йәһәттән дә коллективҡа директор үҙе үрнәк була ала: уның үҙ ғүмерендә бер сигарет та ҡабып ҡарағаны юҡ.

Һәр кем көноҙон үҙ эше менән мәшғүл. Хеҙмәтенә күрә хөрмәте тигәндәй, барыһы ла бында эшләп йөрөгәненең ҡәҙерен яҡшы белә.

Тағы бер нәмәне айырым билдәләп китмәү яҙыҡ булыр: бында йәштәргә ихтирамлы һәм ышанып ҡарау хас. Лабораторияла эшләгән егерме кешенең иң өлкәненә яңы утыҙ тулған. Бынан бер йыл элек кенә институтты тамамлаған Илдар Ғималетдиновты Зәриғәт Мәзхәт улы начальник итеп билдәләгән. Уны: «Грамотаһы бар, техник яҡтан әҙерлекле, башлы егет, — тип ҡылыҡһырлай. — Ә етәксе ҡеүәһе ҡуйған килеш кенә булмай. Һәр кемде лә башта өйрәтергә тура килә».

Ә етәксе булыр өсөн ниндәй сифаттарға эйә булырға кәрәк һуң?

— Иң беренсеһе — әйткән һүҙеңде үтәргә кәрәк, — тип, бай тәжрибәһе менән уртаҡлаша Зәриғәт Ғәзизов. — Йәнә бер нәмә мөһим — һәр кешегә талант эйәһе тип ҡарарға кәрәк. Талантһыҙ кеше юҡ. Етәксенең бурысы шуны күреү һәм асырға ярҙам итеү, һәм беҙҙең Салауат Мөхтәр улы Ғайсин кеүек, уны оҫта итеп ҡуллана белеү. Ҡул аҫтында эшләгән һәр кешенең көслө яҡтарын күрә һәм үҫтерә белеүе менән ул һәр саҡ һоҡландыра.

Йәнә, принципиаллектең булыуы бик кәрәк. Ҡушҡаныңды теүәл үтәүҙәрен талап итеү мотлаҡ. Әйткән һүҙен тотмаған етәксене халыҡ бик тиҙ һиҙеп ала һәм ихтирамы шунда уҡ кәмей.

Зәриғәт Мәзхәт улының был фекерҙәрен тормошта әүҙем ҡулланыуы коллектив миҫалында ла күренә. «Спутник»та төрлө кимәлдәге етәкселәр тупланып, бер команда булып эшләй. Директор һәр урын-

баҫарының, баш бухгалтерҙың, һәр тармаҡ етәксеһенең яҡшы эшләүе хаҡында ғорурланып һөйләй.

Әгәр ҙә һәр кеше был донъяға үҙенә генә хас бурысты үтәргә килә тигән күҙлектән ҡарағанда, Зәриғәт Мәзхәт улы Ғәзизовтың төп тәғәйенләнеше, уның күңел ихтыяжы, моғайын, тәрбиәселер. Һәм ул, ҡайҙа, кем булып эшләүенә ҡарамаҫтан, ана шул тәғәйенләнешенә тоғро ҡала. Бер ваҡытта ла, үҙенең яҙмышы ниндәй юҫыҡҡа боролһа ла, үҙе менән йәнәш йәшәгән кешеләрҙең мәнфәғәтен ҡайғыртыуҙан туҡтамай. Булғаны менән уртаҡлашырға, ҡулынан килгәнсә ярҙам итергә тырыша. Миәкә районындағы үҙенең тыуған мәктәбенә компьютерҙар бүләк иткән. Миәкәлә эшләгән ваҡытта район больницаһында бер нисә кабинетты йыһазландырғандар, балалар баҡсаһына уйын ҡорамалдары эшләгәндәр. Былар береһе лә предприятиеға, эш кешеһенә зыян килтереп түгел, субботниктарҙа эшләп алған аҡсаларҙы йәлеп итеп, иҫкергән ҡорамалдарҙы ҡулайлаштырып күрһәтелгән ярҙамдар. Яңы Ишле ауылында мәсет һалдырған Зәриғәт Мәзхәт улы. Халыҡ унда ихлас йөрөй, мәҙрәсәһендә әле ете бала уҡый. Тыуған яҡты өйрәнеү музейын ойошторорға, йыһазларға ярҙам иткән. Өфөгә килгәс, зәғиф балалар уҡыған мәктәпкә төрлө ҡорамалдар бүлгәндәр.

Бына шундай эштәре өсөн ул «Быуат меценаттары» тип аталған халыҡ-ара мәрхәмәт фонды тарафынан «Намыҫ һәм файҙа» миҙалы менән бүләкләнгән.

Наградалары араһында йәнә «Спартак»ҡа — 70 йыл» тигән миҙалға иғтибар иттем. Ҡайҙа ғына эшләһә лә, спортҡа ҙур көс һала Зәриғәт Ғәзизов, сөнки уны иң йоғонтоло тәрбиә сараларының береһе тип иҫәпләй. Спорт һәм һауыҡтырыу эштәре алып барыу өсөн бик матур спорт залы төҙөлгән. Әле «Спутник»тың үҙенең профессиональ кимәлдә шөғөлләнгән волейбол командаһы бар. «Связист» командаһы юғарғы лигаға сығыу маҡсаты менән йәшәй. Еңел һәм ауыр атлетика, спорттың ҡышҡы төрҙәре, мини футбол, шахмат, теннис менән шөғөлләнер өсөн шарттар булдырылған. Коллективтың 90 проценты күңеле ятҡан спорт төрө менән шөғөлләнә. Бында 5 спорт мастеры, 12 спорт мастерлығына кандидат эшләй.

Ғәзизовтың иң юғары баһалаған сифаттарының береһе — кешегә мөнәсәбәт. Оло кешене рәнйеткәнде бөтөнләй ҡабул итә алмай, шуға күрә уларға ифрат иғтибарлы. Ғөмүмән, кеше ата-әсәһенә, ғаиләһенә, балаларына, дуҫтарына, иленә тоғро булырға тейеш тип иҫәпләй.

— Тәрбиәгә ҡул һелтәп ҡарау арҡаһында һуңғы йылдарҙа илебеҙҙә тотош бер быуынды юғалттыҡ. Элек бала октябрят йәшенән үк йәмғиәткә йәлеп ителә торғайны. Унан пионер, комсомол. Һәр этапта бер бурыс, шулар тәрбиә эше булараҡ, бер-береһенә бәйләнеп бара ине. Хәҙер шуларҙың барыһын да таратып бөттөк. Бер кемгә бер нәмә кәрәкмәй, — тип әсенеүе менән уртаҡлаша ул. — Нимәлер талап иткәнгә тиклем, баланы тәрбиәләргә, үҙаллы эшләрлек кимәлгә еткерергә кәрәк әле.

Ул ғүмере буйы шул принциптан сығып эш итергә өйрәнгән һәм үҙен әле лә коммунист итеп тоя.

“Коммунизм идеяларын кемдер бысратҡан икән, быға ул гүзәл идеялар ғәйепле түгел. Әле Рәсәй халҡының етмеш проценты хәйерселектә йәшәй. Уҡытыусы, врач 3 мең һум эш хаҡы ала. Эш кешеһенең ҡәҙере бөттө. Ә элекке бушҡа уҡыу, бушҡа дауаланыу мөмкинлектәре насар инеме ни? Ауылдан килгән һәләтле балалар бөгөн институтта түләүле уҡый алмай. Киләсәккә өмөт юҡлығы кешене төшөнкөлөккә төшөрә, йәш кенә ҡыҙҙар фәхешлек юлына баҫа.

Ә хөкүмәт ҡайҙа? Ниңә, әле беҙҙең илдә аҡса юҡмы ни? Уны ҡайҙа ғына исрафламайҙар, ә халыҡты ҡайғыртыусы юҡ”.

Ғүмер буйы халыҡ араһында ҡайнап йәшәгән, үҙен уның бер вәкиле итеп тойған кеше был ваҡиғаларға һыҙланмайынса ҡарай алмай, әлбиттә.

Әммә ҡайҙа ғына эшләһә лә, коллективты еңеүҙәргә рухландырып, уңыштар яуларға күнеккән Зәриғәт Мәзхәт улының тәбиғәтенә хас түгел төшөнкөлөккә бирелеү. Был йәһәттән уға ғаиләһендә бәхетле булыуы ла ярҙам итә.

Ул ҡатын-ҡыҙҙа эске матурлыҡты, наҙҙы һәм ғаиләгә тоғролоҡто юғары баһалай. Гүзәл заттың төп бурысы — ғаилә усағының ялҡынын һүрелдермәү, бала бағып тәрбиәләү тип иҫәпләй. Эсә тәрбиәһе алған бала мәрхәмәтлерәк булып үҫә, тигән фекерҙә. Тормош юлдашы бөтөн был талаптарға яуап биргән күркәм кеше.

— Ҡатыным бик аҡыллы ғаиләнән. Улар ҙа алты бала үҫкән. Берберeһе менән һуңғы тамсы һыуҙы бүлешергә, бер-береһе өсөн үлергә әҙер булырлыҡ итеп тәрбиәләнгәндәр. Уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәре, шундай йылы һәм фиҙакәр итеп аралашыуҙары миңә лә ҙур йоғонто яһаны, — ти Зәриғәт Мәзхәт улы. — Эшләгәндә лә, кешеләр менән аралашҡанда ла уларҙың ярҙамдары ҙур булды.

Минзәлә Ғәзизова иренең тоғро ярҙамсыһы, ғаилә усағын һаҡлаусы булыу менән бергә, яратҡан һөнәрендә лә ҙур уңыштарға өлгәшкән. Ул — мәғариф отличнигы, юғары категориялы уҡытыусы, атаәсәләрҙең дә, уҡыусыларҙың да ҙур ихтирамын, мөхәббәтен яулаған талантлы педагог, әле лә мәктәптә эшләй.

Ғәзизовтар ғаиләһенең татыу һәм наҙлы мөхитендә ике ҡыҙҙары үҫеп еткән. Эшсән, тырыш һәм аҡыллы ҡыҙҙар ата-әсәләрен үҙҙәренең уңыштары менән һөйөндөрә. Икеһе лә урта мәктәпте миҙалға тамамлаған. Артабан оло ҡыҙҙары Эльза Башҡорт дәүләт медицина университетында белем алған. Уның инде үҙенең ғаиләһе бар. Бәхетле олатай менән өләсәй ейәндәре Ғәлиәскәрҙе һағынып көтөп ала. Кесе ҡыҙҙары Гүзәл Өфө дәүләт авиация-техник университетының иҡтисад факультетын уңышлы тамамлағандан һуң, «Инвесткапиталбанк»та эшләп йөрөй.

Мәрхәмәттән бәрәкәт табып, бына шундай күркәм замандаш йәшәй арабыҙҙа. Ошондай кешеләр булған өсөн дә тормош дауам итә, баҫыуҙарҙа иген үҫә, йорттар төҙөлә һәм донъя ҡуласаһы һәүетемсә генә өйөрөләлер, моғайын.